## ZARİNA BAGİŞAYEVA

*1990-cı il noyabrın 13-ü* BAŞQURDİSTAN*ın Zilairsk rayonunun Sabırovo kəndində doğulub. Başqurdistan Dövlət Universitetinin məzunudur (2013). Q.Zaripov adına Ödülün və X.Tapakov ad. Dövlət Ödülünün laueratıdır.*
*"Amanat" dərgisi redaksiyasında bölmə redaktorudur.*

### *ТИРМӘ*

Селтәр итеп сиктем һөйөүемде –
Ҡыҙҙың бит ул иң төп бирнәһе.
Ҡорған саҡта ғаилә тирмәһен,
Бәлә-ҡаза Хоҙай бирмәһен!
Ел-дауылға, ямғырҙарға берүк
Бирешмәһен ҡорған тирмәләр!
Тарҡалмаһын дуҫлыҡ, эт-бүреләр
Олоһа ла эргә-тирәлә.

Тирмә эсен бер өҙлөкһөҙ әйҙә,
Һөйөү-усаҡ янып, йылытһын!
Бәхетегеҙ артып торһон, тиеп,
Һәр көнөбөҙ беҙҙе йылмайтһын!

### *ҺАНДУҒАС*

"Кәкүк," – тинең мине, белмәйенсә,
Һандуғастан затым икәнен.
"Ары ос, һин, килмә," – тип әйттең дә,
Баҡса ишегеңде бикләнең.

Ә үҙең һуң?! Моңом ағылғанда
Киң сәхрәлә, Һаҡмар буйында –
Һайрар ҡоштоң йырын, һағыштарын
Йәшәттең һин хыял-уйыңда.

Эй табындың ошо һандуғасҡа,
Асып ҡуйҙың күңел тәҙрәһен.
Белмәүеңә уның мин икәнде
Һайрай-һайрай, көскә түҙәмен.

Һинең өсөн кәкүк булып осам,
Арбаһам да йырым, моң менән.
Һандуғас, тип берәй ваҡыт, бәлки,
Танырһың да, әммә мин килмәм...

## *ЕРӘН ҠАШҠА*

Артыҡ ҡыҙыл тиҙ уңа, тип,
Ҡурҡам ғашиҡ булыуҙан.
Ҡайнар хистәр азат түгел
Ҡапыл боҙҙай туңыуҙан.

Сәскәләрҙең таждары ла
Ҡойола берәм-берәм...
Һөйөүемдең гөлләмәһен
Һағышланып һеперәм...

Шуға күрә күңелемдә
Тыңламам, тиһәм башҡа,
Шәп батырҙы килтергәйне
Яҙмышым - Ерән ҡашҡа-

Онотолдо вәғәҙәләр,
Йөрәгем типте "дөп-дөп"...
Тотош ғаләм баҡты безгә
Гүйә йылмайып, көлөп...